

# Тимер Йосопов

60 йәш

## ҺАЛМАҒАЯ АҘЫМДАР, ҺӘЛМӘГӘЙӘ ХИС-УЙҘАР 4.

Тимер Йософов менән беҙ бер үк бала саҡ иленән. Сабый һәм үсмер саҡтарыбыҙ һуҡмаҡтары төрлөбөҙҙөң төрлө яҡта үтһә лә, телебеҙ бер үк һүҙҙәрҙе ҡабатлап асылды, күҙҙәребеҙ бер үк китаптарға ҡарап хәреф танырға өйрәнде, аңыбыҙ бер үк иманға инанып нығынды. Беҙҙе бер үк ҡайғылар сыныҡтырҙы, бер үк өмөттәр алға әйҙәне. Беҙ — һуғыш балалары, шул һүҙҙәр менән күп нәмәне аңлатып була. Бөгөн дә арабыҙҙа көндән-көн һирәгәйә барған ҡарт һалдаттарҙы төндәр буйы ыҙалаған һуғыш ярсыҡтары беҙҙең тәнебеҙгә түгел, сабый йәнебеҙгә инеп ултырҙы. Һыҙланыуҙар ғүмер буйы баҫылмаҫлыҡ булып уйылды.



1966 йылдың февралендә "Совет Башҡортостаны" гәзитендә уҡыусыларға әлегә тиклем айырым шиғырҙары буйынса ғына билдәле булған йәш шағирҙың ҙур ғына шәлкеме баҫылғайны. Йәш ҡәләмдәштәренә ғәжәп иғтибарлы һәм шул уҡ ваҡытта һәр саҡ талапсан Рәми Ғариповтың бик ихлас инеш һүҙҙәре менән асылғайны ул шәлкем. Ундағы шиғырҙарҙы уҡығас, шиғриәт һөйөүселәр яңы һәләтле йәш шағирҙың әҙәбиәтебеҙгә ҡыйыу атлап килеүен күреп ҡыуанғайны.

Бынан һуң күпме ғүмерҙәр үтеп китте. Ошо йылдарҙа Тимер Йософов туҡтауһыҙ ижад эҙләнеүҙәре, тынғыһыҙ эҙмыш менән йәшәне. Бер-бер артлы уның "Икмәк еҫе", "Йылдар сылбыры", "Алтын туҙан", "Усаҡ яна", "Хәтеремдең тере ҡуҙҙары", "Ташҡын", "Олатайҙар юлы", "Ҡая өҫтөндә уйланыу" исемле шиғри йыйынтыҡтары донъя күрҙе, Мәскәүҙә "Снежное поле" исемле китабы баҫылып сыҡты. Шағирҙың шиғырҙары һәм поэмалары уҡыусыларҙы бер ҡасан да битараф ҡалдырманы, уҡыусыларҙың да, тәнҡиттең дә һәйбәт баһаһын алды. Хәҙерге башҡорт поэзияһы тураһында һүҙ барғанда, Тимер Йософов әҫәрҙәре хаҡлы рәүештә бөгөнгө шиғриәтебеҙҙең иң ҡыуаныслы күренештәре рәтендә баһалана.

Хәҙер мин янынан 1966 йылда "Совет Башҡортостаны" гәзитендә баҫылған шиғри шәлкемгә әйләнеп ҡайтып, ундағы ошо юлдарға иғтибар итергә теләйем:

***Оноторлакмо һуң,***
***Булды бит ул***
***Бик тилмергән саҡтар икмәккә.***
***Башаҡ сүпләп ҡамыл төптәренән,***
***Йөрөмәнек һис тә ирмәккә...***
***...Ер мәңгелек. Ер янмаҫҡа тейеш.***
***Тыныс булһын илем кистәре.***
***Тормош күрке булып, һәр бер өйҙән***
***Гел таралһын икмәк еҫтәре.***

Был юлдар — "Икмәк еҫе" исемле шиғырҙан. Шағир үҙенең тәүге китабын да шулай атағайны. Ижад донъяһына тәү ҡат ныҡлап аяҡ баҫҡан йылдарында Тимер Йософовтың иң билдәле шиғырҙары "Икмәк еҫе" менән "Бесән өҫтө" булғандыр. Шиғыр кисәләрендә лә ул саҡта шағир күберәк шуларҙы уҡый торғайны. Ә инде Тимерҙең тәбиғәт биргән тауышы өҫтөнә шиғыр уҡыу оҫталығын уны тыңлаған кешеләр яҡшы белә.



"Бесән өҫтө" исемле ҙур булмаған шиғырҙағы тол ҡатындың эҙмышы онотторлоҡ түгел.

Тимер Йософовтың тәүге шиғырҙарында уҡ бала саҡ хәтирәләре, етемдәрҙең өмөт-хыялдары, тол ҡалған еңгәләрҙең, апайҙарҙың һағышы, яуҙа ятып ҡалған атайҙарҙы, ағайҙарҙы юҡһыныу үҙәктә



булды. "Икмәк еҫе" менән "Бесән өҫтө"ндә билдәләнгән йүнәлеш тулылана, төрлө яҡлап асыла барҙы. Тормоштоң ҡәҙерен, кеше ҡулындағы икмәктең, кеше күңелендәге йомартлыҡтың, илдәге тыныс көндөң баһаһын аңларға шағир иртә өйрәнде, ошо хәҡиҡәттәрҙе ил иңенә төшкән ҙур юғалтыуҙар аша асты. Күпме фажиғәләр үткән халыҡтың тарихи яҙмышы, хәтерендә быуаттарҙы һаҡлаған тыуған ерҙең уҙғаны һәм киләсәге тураһында уйланыу — Тимер Йосоповтың күпме әҫәрҙәре бына шул ерлектә тыуҙы. Әммә халыҡ уның өсөн ниндәйҙер абстракцияға әйләнмәне, кеше күңеленең матурлығы, кеше рухының ҡаһарманлығы аша тере булып кәүҙәләнде.

Шуға ла Тимер Йосопов шиғриәте бик кешелекле шиғриәт. Уның күңеле — донъяға киң асылған ихлас күңел. Үҙе өсөн ҡайғырыр урында ла шағир башҡалар өсөн өҙгөләнә, һәр саҡ кешеләргә ылығып, башҡаларҙың шатлығы менән үҙен бәхетле тойоп йәшәй. Уның китаптарында тормошто ал да гөл итеп, буяп-һыйпап күрһәткән юлдар юҡ. Сөнки тормоштоң аяуһыҙ дөрөҫлөгөнә ул тура ҡарай. "Арҡа терәр ирҙәр гүрҙә ята, арҡаларын терәп таштарға". Шуға ла йылдар үткән һайын шағир өсөн ысын кешенең ҡәҙере арта бара, шуға ла "Арҡаланыр ерҙәр эҙләмәнем, арҡа терәр ирҙәр эҙләнем", — ти ул.

***Ярай әле минән яхшылар бар:***
***Иртә тора улар,***
***Һуң ята.***
***Яҡшылар бар,***
***Кисә алғандарын***
***Ҡайтара ла булыр унлата, —***

тип башлана Тимер Йосоповтың "Яҡшылар бар" тигән шиғыры. Уның һуңғы юлдары былай:

***Баҫыуҙарҙа ҡалхкан мул***
***игендәр***
***Минән башка сәсеп урылды.***
***— Шәп егетһең, — тиеп,***
***Йәнде уртәп,***
***Ҡайнатмағыҙ әле ҡурымды...***



Тимерҙең бар булмышы өсөн был шиғыр бик хас булғанға, өҙөктәр ҙә унан күберәк килтерелде. "Ярай әле минән яҡшылар бар", — тип, тормошта һәр кем әйтә алмай, үҙенән һәйбәт кешеләрҙе күреп, һәр кем шулай ихлас ҡыуана алмай. Уның өсөн ҙур йөрәк, киң күңел кәрәк. Ҡайҙа ул ҡыуаныу, күптәр үҙенән яҡшылар булғанға көнсөллөгөнән ҡара көйә, тарлығынан шартлаҙай була. Шиғыр һис бер көсәнеүһеҙ, бик тәбиғи: "Шәп егетһең, тиеп, йәнде үртәп, ҡайнатмағыҙ әле ҡурымды", — тип тамамланып ҡуя. Заманында илде ойоторлоҡ дәрәжәгә еткән буш маҡтауҙарҙы шағирҙың һиҙгер күңеле йәнә ытырғанып кире ҡаға.

Тимер Йосопов заманды һиҙгер тойоусан шағир. Илдәге үҙгәрештәр уны яңы шиғырҙарға илһамландырҙы, был хаҡта ул беҙҙең шиғриәттә тәүгеләрҙән булып һүҙ әйтә алды. "Берүк менән телмәр һөйләтмәгеҙ, сәсәтмәгеҙ ҡыуып йөк атын", — тип яҙҙы ул.



Тимер Йосопов бына шундай борсолоуҙар менән йәшәй. Уның китаптарының береһе "Ҡая өҫтөндә уйланыу" тип атала. Шағирҙың барлыҡ ижад юлы — яңы ҡаяларға ынтылыу, яңы бейеклектәрҙә уйланыу. Ҡайһы берәүҙәрҙең илле йәшенә лә, алтмыш йәшенә лә тып итеп сығып торған томдары янында Тимерҙең китаптары, әлбиттә, бәләкәй күренер. Әммә уның ижадының эстетик ҡиммәте ҙур, йөкмәткеһе тос. Шағир "Ҡабарған саҡ", "Кем һуҡты" кеүек үҙенсәлекле хәлдәргә нигеҙләнгән, төрлө яҙмыштарҙы асыусы көслө-көслө шиғырҙар яҙҙы. Уның китаптарында иң нескә кисерештәргә, күңел нюанстарына, күсеш-оҡшашлыҡтарға ҡоролған уңышлы шиғырҙары ҡыуандыра.

Һуңғы йылдарҙа күңелемде ҡанатландырып, шатлығымды үҫтереп ебәргән китаптарҙың иң тәьҫирлеһе — Тимер Йосоповтың 1994 йылда донъя күргән "Ауырая аҙымдар" исемле йыйынтығылыр.

Китапҡа дөйөм баһалар бирерҙән алда уның тәүге битен асайыҡ та тәүге шиғырҙың — "Күләүектә — ғаләм" тигән шәлкемдең — тәүге юлдарын уҡый башлайыҡ. Бына ул юлдар:

***Тағы күҙ бәйләнә.***
***Күк — көҙгөләй,***
***Үрелеп тә саңын һөртөрлөк.***
***Мыңғырлап та торған был йондоҙҙар,***
***Урын да юҡ энә төртөрлөк.***
***Талғын ғына миҙгел тыны һуғылып,***
***Сәләм килгән саҡта көҙөнән,***
***Бындай төндә инде киленсәк, тим,***
***Еп үткәрер энә күҙенән.***

Бына ошондай ғәжәп һил мәлдә, аяҙ төндә донъяға һоҡланып, тулған айҙай күңеле тулып баҡҡан шағир бөгөнгө замандың ҡыйралыш-тарҡалыштары уртаһында һыҙлана-өҙгөләнә. Шағир яҙмышы төрлө мәлдәрҙә, төрлөсә моңяңғыраштарҙа асыла, ләкин ил хәлдәре, милләт хәлдәре өсөн хафа, һағышлы һәм борсоулы уйҙар әсәрҙән-әсәргә үрелеп, үҙәк тойғоға, төп фекергә әйләнә.

Тимер Йосопов һикһәненсе йылдар уртаһындағы үҙгәрештәр хаҡында шиғриәтебеҙҙә тәү башлап һүҙ әйтеүселәрҙең береһе булды. Күп тә үтмәй, баштағы елкенеүҙәр урынына, бөтөнләй башҡа кисерештәр килде.





***Заман килде!***
***Бындай елле һүҙҙе***
***Мин әйтмәйсә инде кем әйтте.***
***Йырҙарымда мин алдашмай***
***инем,***
***Кешеләрем, һеҙҙе һемәйттем.***

Аяуһыҙ дөрөҫлөктөң күҙенә тура ҡарап, шағир бына шулай тип өндәште.

Тимер Йосопов — һәр саҡ хәҡиҡәткә тоғро ҡалыусан шағир. Уйтойғоларҙың ихласлығы һәм тәбиғилеге, үҙ яҙмышы, үҙ йөрәге аша үткәндәр, кисергәндәр хаҡында ғына һөйләү — Тимер Йосопов шиғриәтенең ошо сифаттары уның китаптарында ғәжәп кешесә асылған. Шағир сабый менән дә, аҡһаҡал менән дә, тотош йыһан менән дә, ерҙәге кескәй ҡыяҡ менән дә, уҙған менән дә, бөгөнгө менән дә уртаҡ тел таба белә. Шуларҙың барыһын бергә кисереп йәшәй.

Тимер Йосоповтың шиғырҙарында һәм поэмаларында донъяның әллә күпме төҫтәрен, ауаздарын, хәрәкәттәрен, кеше рухының әллә ниндәй балҡыштарын һәм һүнеүҙәрен, яныуҙарын һәм һүрелеүҙәрен күреп һоҡланаһың да, һыҙланаһың да. Бындағы күпме образдар күнегелгән күренештәрҙе лә бөтөнләй яңы яҡтан күрһәтә: "йондоҙҙар һымаҡ, күҙ йәшем эре", "офоҡ яна, офоҡ яна, йылыһы ғына сыҡмай", "ялдарын торғоҙоп, ҡалҡына аҡ боҙҙар", "керпеген уйнатып, йөрәккә исемеңде сыйҙың. Иҙелдә — аҡ сыйҙым, Йыһанға саҡ һыйҙым". Шиғриәт юлынан Тимер бер ваҡытта ла еңел-елпе атламаны, аҙымдары ныҡлы һәм ырамлы булды. Йылдар үтеү менән яуаплылыҡ та иңдәрҙе нығыраҡ баҫа, йылдар үтеү менән һалмағая аҙымдар, һәлмәгәйә хис-уйҙар.

Тимер Йосоповтың алтмыш йылда үткән юлы шиғырҙар, поэмалар, китаптар менән билдәләнеп барған. Шул алтмыш йылдың яртыһынан күбеһен уның менән бергә үтеүемә ҡыуанам. Уның әҙәбиәттә үҙ яҙмышы, үҙ моңо, үҙ ижади шәхесе, үҙ шиғри донъяһы бар. Бөгөнгө әҙәби мөхиттә күренекле урыны, үҫеш процесына яһаған көслө йоғонтоһо бар, һыналған оҫталарҙа ғына була торған үҙ тамғаһы бар. Дөйөм һүҙ һөйләүсе дөйөм йөҙләләр быларҙан мәхрүм.

"Йылы елдән тауҙар ҡарайғанда, ағарған да ҡуйған сәстәрем", — тип, уйсан ғына әйтеп ҡуйғайны шағир. Тауҙар тағы ла ағарыр ҙа туҡтауһыҙ яңырыр, ә шағир күңеле әллә күпме сәбәптәрҙән һыҙланыр, әллә күпме ҡыуаныстар менән елкенер. Ҡәләмдәш дуҫым артылған яңы ҡаяларҙан тағы ла киңерәк донъялар күренер.

Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.

Халыҡсан образлылыҡ, үҙ ижадын халыҡ яҙмышы менән бәйләргә ынтылыу — Тимер Йосопов шиғриәтенең йәштәр араһында ғына түгел, ә бөтә шиғриәтендә көслө яңғырауға сәбәп булды.

Әхиәр ХӘКИМОВ (1965).



"Алтын туҙан" йыйынтығы Т. Йосоповты шиғриәттең алғы сафына баҫтырҙы.

Вафа ӘХМӘҘИЕВ (1975).

Тимер Йосопов — кеше күңеленең ысын рыцары.

Ким ӘХМӘТЙӘНОВ (1981).

Тимер Йосопов поэзияһының ергә ереккән, ергә тамырҙарын тәрән ебәргән имән шикелле, ул үҙ ижадына һутты тыуған яҡтарынан, тыуған тупрағынан ала, уның йөрәге лә, гүйә, тыуған тауҙары ҡуйынында.

Ут-нур образы Т. Йосопов поэзияһына үҙенсә бер йылылыҡ, нур бөркөп тора. Ул йә ерҙе йәшәртер һәм йәшәтер ҡояш булып балҡый, йә игендәрҙе бешерер нәжәғәй булып ялтырай, йә тыуған йорт, әсә усағындай булып күңелдәрҙе йылыта. Уның йөрәккә ҡабынған ялҡын, батырҙар иҫтәлеген хәтерләткән мәңгелек ут, һөйөү уты кеүек әллә ни хәтле бүтән мәғәнәле образдары бар.

Йөрәктә, усаҡта ут яна икән, тимәк, кеше йәшәй, тормош дауам итә. Прометей уты тәнде-йәнде йылытып, шағирҙың шиғыр юлдарына ла сайпылып ҡаба ла йөрәктәргә йылы нур булып инә.

Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ (1981).



Тимер — кешеләр хәлен, тәбиғәт хәлен, донъя хәлен белеүсе, улай ғына ла түгел, уларҙың хәленә кереүсе шағир.

Мостай КӘРИМ (1988).



Шундай өлгөргән шәхес кенә, талантлы шағир ғына:

***Быуаттарҙы...***
***Инде бар уттарҙы***
***Йыйған кеүек минең күкрәгем.***
***Баш осомда йәшен йәшнәһен дә***
***Йылдар күктәр булып күкрәһен,***

тип яҙа алалыр, моғайын.

Әнүр ВАХИТОВ (1983).

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ**

## Ауырайған саҡта аҙымдар

*Тимер Йосоповка*

*Тимер дуҫым, ниңә һин иртәрәк*
*Ауырая, тиһең, аҙымдар?*
*Әле көтөп алыр көҙҙәрең бар,*
*Ярһып килер күпме яҙың бар,*
*Һурелмәҫлек күпме наҙың бар.*

*Шул яҙҙарҙа ятып тулайһың бар*
*Үҙең һымаҡ ҡара ереңә.*
*Һөйөүеңде биреп бөтмәгәнһең*
*Мәңге тоғро берҙән-береңә.*
*(Артыҡ ҡыҫылмайым сереңә.)*

*Инде беҙгә ҡарамаһын да, ти,*
*Аҙым еңеләйтер ҡыҙҙар бар.*
*Билен биштән быуып, сәскән ерҙән*
*Урып-һуғып алыр ҡырҙар бар,*
*Ҡырҙа яҙылаһы йырҙар бар.*

*Һинең йырҙар йөрәк ярып сыға,*
*Шуға ҡала улар йөрәктә.*
*Терелткәнгә һүнгән өмөттәрҙе*
*Улар беҙгә тоғро терәк тә,*
*Шуға ҡала улар йөрәктә.*

*Бөтәһе лә шағир йөрәгенә,*
*Бөтәһе лә шағир башына,*
*Йүгәнһеҙҙәр бөгөн теҙген тотҡас*
*Донъяларға һыймай шашына,*
*Бөтәһе лә шағир башына.*

*Тимер дуҫым, бөгөн ысынлап та,*
*Ауырая икән аҙымдар.*
*Заман еле ыңғай боролһон, тип,*
*Ҡәрәк һуҙҙе әйтер аҙым бар,*
*Ауырайһа ла бит аҙымдар.*

1996 йыл.

## Биографик белешмә

Күренекле шағир Тимер Йосоп улы Йосопов 1938 йылдың 31 майында Башҡортостан Республикаһының Дыуан районы Әпсәләм ауылында колхозсы ғаиләһендә тыуған. Өлкәндә урта мәктәбен тамамлағас, Силәбе әлкәһенең Һатҡы ҡалаһында — йөксө, Ҡыйғы районы гәзитендә әҙәби хеҙмәткәр булып эшләй. 1962—67 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетында белем ала. Университеттан һуң Бөрйән районы Асҡар мәктәбендә уҡыта. Өфөлә "Башҡортостан пионеры" (хәҙерге "Йәншишмә") гәзитендә, Башҡортостан Яҙыусылар союзында әҙәбиәтте пропагандалау бюроһында эшләй. Мәскәүҙә Юғары әҙәбиәт курстарҙа уҡып ҡайтҡас, 1983—1988 йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе урынбаçары була.

Хәҙерге көндә — профессиональ яҙыусы.

1988 йылда уға "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" тигән исем бирелде.

1971 йылдан — Яҙыусылар союзы ағзаһы.



## ТИМЕР ЙОСОПОВ КИТАПТАРЫ:

1. ИКМӘК ЕҪЕ. Шиғырҙар. Өфө, 1968 йыл.
2. ЙЫЛДАР СЫЛБЫРЫ. Шиғырҙар. Өфө, 197! йыл.
3. АЛТЫН ТУҘАН. Шиғырҙар. Өфө, 1975 йыл.
4. УСАҠ ЯНА. Шиғырҙар. Өфө, 1978 йыл.
5. ХӘТЕРЕМДЕҢ ТЕРЕ ҠУҘҘАРЫ. Шиғырҙар. Өфө, 1980 йыл.
6. ТАШҠЫН. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө, 1982 йыл.
7. СНЕЖНОЕ ПОЛЕ. Стихи. Москва, 1983 год.
8. ОЛАТАЙҘАР ЮЛЫ. Шиғырҙар, поэма. 1984 йыл.
9. ҠАЯ ӨҪТӨНДӘ УЙЛАНЫУ. Шиғырҙар. 1988 йыл.
10. КИЛДЕ ЗАМАНАЛАРЫ. Шиғырҙар. Өфө, 1990 йыл.
11. АУЫРАЯ АҘЫМДАР. Шиғырҙар, поэма. Өфө, 1994.
12. КЫЯ ӨСТЕНДӘ УЙЛАНУ. Шигырьләр. Казан. 1996 ел.
13. БЕШТЕ ЕР ЕЛӘККӘЙҘӘРЕ. Шиғырҙар. Поэма. Өфө, 1998.

Башҡортостан Республикаһы Яҙыусылар союзы

Тимеп ЙОСОПОВ

БУКЛЕТ

Төҙөүсе-мөхәррире Риф Тойғонов (Тойғон).

Рәссамы Марат Байназаров.

Өфө. 1998 йыл.